# БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК

## ОТБОРОЧНЫЙ (ДИСТАНЦИОННЫЙ) ЭТАП
## 8-9 КЛАССЫ

## ИНСТРУКЦИЯ ПО ВЫПОЛНЕНИЮ ЗАДАНИЙ ОЛИМПИАДЫ ПО БАШКИРСКОМУ ЯЗЫКУ

Олимпиадная работа состоит из 50 тестовых заданий. На каждое задание предлагаются четыре варианта ответа, один из которых правильный. На выполнение заданий отводится 1 час 30 минут.

Каждое задание оценивается по 2 балла. Баллы, полученные Вами за выполненные задания, суммируются.

Постарайтесь выполнить как можно больше заданий и набрать наибольшее количество баллов.

Желаем успеха!

### Лексикология

**Задание 1**. *Таң ҡалыу, арт һабағын уҡытыу, уртаҡ тел табыу* һүҙҙәрен мәғәнәләре буйынса нисек атап була?

1. Омонимдар
2. Антонимдар
3. Фразеологизмдар
4. Диалектизмдар

**Задание 2**. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәр нисек атала? *Тышта борсаҡ яуа – Быйыл борсаҡ уңған*.

1. Омонимдар
2. Антонимдар

3. Диалектизмдар
4. Синонимдар

**Задание 3.***Баш* һүҙе ҡайһы осраҡта тура мәғәнәһендә ҡулланылған?
1. Баш күтәреүселәр
2. Тау башы
3. Кеше башы
4. Баш ҡатырыу

**Задание 4.** Төп башҡорт һүҙен билдәләгеҙ:
1. сәнғәт
2. хикмәт
3. ҡәләм
4. ағай

## Морфология

**Задание 5.** Һөйләмдәрҙең ҡайһыныһында исем урын-ваҡыт килештә килгән?
1. Икмәкте хурлама, ҙурла.
2. Изгелектең иртәһе – кисе юҡ.
3. Ат – туйған ерендә, егет – тыуған илендә.
4. Булыр бала биләүҙән билдәле.

**Задание 6.** Һөйкәлеш категорияһы ниндәй һүҙ төркөмөнә хас?
1. исем
2. ҡылым
3. сифат
4. киҫәксә

**Задание 7.** Урын рәүештәрен табығыҙ:
1. Яҡында, бында, алда, йәнәшәлә
2. Шәп, рәхәт, тиҙ, ҡапыл, кинәт
3. Элек, борон, иртән, бая, бөгөн
4. Күп, байтаҡ, әҙ-мәҙ, өсләтә, саҡ-саҡ

**Задание 8.** Ҡайһы һөйләмдә һан исемләшкән, йәғни иҫәпте лә, исемде лә белдереп килә?
1. Мостиктың дүрт мөйөшөндә - дүрт матрос.
2. Етеһе лә матур, етеһе лә батыр икән.
3. Ер йөҙөндә биш меңләгән тел бар.
4. Инде өсөнсө йыл һуғыш бара.

**Задание 9.***Барҙы – барған – бара – барасаҡ – барыр*. Ҡылымдың ниндәй формаларына миҫалдар бирелгән?
1. Һөйкәлеш формалары
2. Барлыҡ-юҡлыҡ формалары
3. Йүнәлеш формалары
4. Заман формалары

**Задание 10**. *Бер-береңә ышанырға, иғтибарлы булырға, дуҫыңдың эштәре, тормошо менән ҡыҙыҡһынырға, бер-береңә ярҙам итергә, таянырға*. Был һөйләмдә ҡылымдың ниндәй төркөмсәһенә миҫалдар бар?
1. Исем ҡылым
2. Хәл ҡылым
3. Сифат ҡылым
4. Уртаҡ ҡылым

**Задание 11.** Ҡылымдың ҡайһы һөйкәлеш формаһы ҡылымдарҙың тамыры йәки нигеҙе формаһы менән тап килә?
1. Бойороҡ һөйкәлеше
2. Шарт һөйкәлеше
3. Хәбәр һөйкәлеше

4. Теләк һөйкәлеше

**Задание12**. Йөкмәтеү йүнәлеше ҡылымдары бирелгән юлды билдәләгеҙ:

1. Уҡый, яҙа, йыуа, килә, китә
2. Сабырһыҙлана, кейенә, биҙәнә
3. Йыуыла, төҙөлә, биҙәлә, уҡыла
4. Эшләтә, яҙҙыра, көлдөрә

**Задание 13**. *Тейенде барып ҡулыма алғым, һөйгөм килде.* Был һөйләмдәге ҡылымдар ниндәй һөйкәлеш ҡылымдары?

1. Хәбәр һөйкәлеше
2. Шарт һөйкәлеше
3. Бойороҡ һөйкәлеше
4. Теләк һөйкәлеше

**Задание 14**. *Йылға нисектер ҡапыл йәнләнеберәк китте* һөйләмендә ҡылымдың заман формаһын билдәләгеҙ:

1. Шаһитлы үткән заман
2. Шаһитһыҙ үткән заман
3. Хәҙерге заман
4. Билдәле киләсәк заман

**Задание 15.***Егет үҙе өсөн тыуа, иле өсөн үлә* һөйләмендә бәйләүестең ниндәй килештән һуң килгәнен билдәләгеҙ:

1. Төп килештән һуң
2. Төбәү килештән һуң
3. Сығанаҡ килештән һуң
4. Төшөм килештән һуң

**Задание16.***Тупрактар сөм ҡара бында, тупраҡ һутланып тора* һөйләмендә киçәксәне табып, уның төрөн билдәләгеҙ:

1. Көсәйтеү киçәксәһе
2. Һорау киçәксәһе
3. Раçлау киçәксәһе
4. Икеләнеү киçәксәһе

**Задание 17.***Куш тирәк шаулай башланы, ямғыр булыр, ахыры* һөйләмендә аçтына һыҙылған һүҙ ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?

1. Теркәүес
2. Киçәксә
3. Бәйләүес
4. Мөнәсәбәт һүҙ

**Задание 18**. *Быйыл ҡыш айырыуса һалҡын* һөйләменең хәбәре ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән?

1. Сифаттан
2. Алмаштан
3. Рәүештән
4. Ымлыҡтан

**Задание 19.** Ымлыҡтарҙы күрһәтегеҙ:

1. шикелле, аша, хаҡта, һымаҡ
2. үтә, иң, ифрат, ғына
3. йәғни, йәнә, шуға, юҡһа
4. бәй, атаҡ, ай-һай, һай

**Задание 20.** Билдәләү алмаштарын күрһәтегеҙ:

1. нисә, ҡасан, ниндәй, ҡайҙа
2. ҡайҙалыр, кемдер, әллә ни, нимәлер
3. һис кем, бер ни, бер нәмә, бер кем дә
4. үҙем, үҙең, үҙе, үҙегеҙ

**Задание 21**. Теркәүестең төрөн билдәләгеҙ: сөнки
1. Сәбәп теркәүесе
2. Шарт теркәүесе
3. Йыйыу теркәүесе
4. Ҡаршы ҡуйыу теркәүесе

**Задание 22.** Сағыштырыу дәрәжәһендәге сифаттарҙан ғына торған юлды билдәләгеҙ:
1. Ағыраҡ, ҙурыраҡ, ҡыҙылыраҡ, матурыраҡ
2. Йәшерәк, һарғылт, көслө, йәм-йәшел
3. Күм-күк, ифрат матур, үтә көслө
4. Алһыу, матурыраҡ, оҙонса, ҡып-ҡыҙыл

**Задание 23**. Ҡайһы юлда һан һүҙ төркөмөнә ҡараған һүҙҙәрҙең һорауҙары бирелгән?
1. Кем? Кемдең? Кемгә? Кемде? Кемдә? Кемдән?
2. Нисек? Ҡасан? Ҡайҙа? Күпме? Ни өсөн?
3. Ни эшләй? Ни эшләгән? Ни эшләне?
4. Нисә? Нисәү? Нисәнсе? Нисәшәр? Нисә самаһы?

**Задание 24.** Составында һөҙөмтә теркәүесе булған һөйләмде билдәләгеҙ:
1. Төн яҡынлап бара, әммә колхозсылар эшкә сығырға ашыҡмайҙар әле.
2. Улар әле береһен, әле икенсеһен бүлеп, шыбырлашып хәбәр һөйләйҙәр.
3. Мин дә юрый уның артынан тәгәрәгән булдым.
4. Мәскәүҙә күп минең дуҫтарым, шуға күрә тыуған еремдең мин алам бары бер ус тупрағын.

**Задание 25**. *Ағайым <u>ҡайтып</u>, бер аҙ <u>торғас</u> та, уны эшкә <u>саҡырҙылар</u>* һөйләмендә аҫтына һыҙылған ҡылымдарҙың ҡайһыһы – хәл ҡылым, ҡайһыһы – хәбәр һөйкәлеше ҡылымы?
1. *Ҡайтып, торғас* – хәл ҡылымдар, *саҡырҙылар* – хәбәр һөйкәлеше
2. *Ҡайтып, торғас* – хәбәр һөйк., *саҡырҙылар* – хәл ҡылым
3. *Ҡайтып* – хәл ҡылым*, торғас, саҡырҙылар* – хәбәр һөйк.
4. *Торғас*, *саҡырҙылар* – хәбәр һөйк., *ҡайтып* – хәл ҡылым

## Һүҙьяһалыш

**Задание 26**. *Туғандарыма* һүҙендә ниндәй ялғау бар?
1. Һан ялғауы
2. Һан ялғауы, зат һәм килеш ялғауы
3. Килеш ялғауы
4. Зат ялғауы

**Задание 27**. *Урман, яулыҡ, һауыт, ыласын* һүҙҙәре нисек яһалған?
1. Яһаусы ялғауҙар ярҙамында
2. Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән
3. Һүҙҙәрҙе бәйләү юлы менән
4. Был һүҙҙәр яһалма һүҙҙәр түгел, тамыр һүҙҙәр

**Задание 28**. Ҡайһы юлда тик тамырҙаш һүҙҙәр бирелгән?
1. Ағарыу, ағартыу, ағыу, ағарған
2. Ел, елкә, елкән, елгәргес
3. Килешеү, килешә, килештәр, килештереү
4. Хеҙмәт, хеҙмәтсе, хеҙмәте, хеҙмәтенә

## Фонетика

**Задание 29**. Һуҙынҡы өндән башланмаған һүҙҙәр генә булған юлды табырғаҙ

1. Алтын, эйәр, илсе, Урал, оло
2. Яҡын, йәнлек, ватан, аҡыл
3. Яусы, юлаусы, елпеүес, Юрғашты
4. Ирәмәл, ҡаһарман, яугир, ынйы

**Задание 30**. *Еңеүсе* һүҙендә нисә тартынҡы, нисә һуҙынҡы өн бар?

1. 3 һуҙынҡы, 4 тартынҡы
2. 4 һуҙынҡы, 3 тартынҡы
3. 3 һуҙынҡы, 3 тартынҡы
4. 4 һуҙынҡы, 4 тартынҡы

**Задание 31**. *Юлъяҙма* һүҙендә нисә тартынҡы, нисә һуҙынҡы өн бар?

1. Бөтәһе лә һуҙынҡы
2. 3 тартынҡы, 3 һуҙынҡы
3. 4 тартынҡы, 3 һуҙынҡы
4. 5 тартынҡы, 3 һуҙынҡы

## Орфография

**Задание 32**. Ҡайһы һүҙҙә ялғау сингармонизм законына ярашлы дөрөҫ яҙылған?

1. Төҙөлөштөң
2. Болотто
3. Гөлдөң
4. Бөтәһендә лә

**Задание 33**. *Фото, код, ток* һүҙҙәрендәге о хәрефе ҡайһы килеш ялғауында һаҡлана?

1. Эйәлек
2. Төшөм
3. Сығанаҡ
4. Береһендә лә яҙылмай

**Задание 34**. Яҙылышы дөрөҫ булмаған һүҙ булған юлды күрһәтегеҙ:

1. көньяҡ
2. төньяҡ
3. һүҙьяһалыш
4. бөтәһе лә дөрөҫ

**Задание 35**. *Арыҫлан йөрәкле* фразеологик берәмеге ниндәй мәғәнә аңлата?

1. етеҙ
2. уҫал
3. батыр
4. аҡыллы

## Синтаксис

**Задание 36**. *Ашлыҡ уңһын, баҫыу гөрләп торһон, Мәңге зәңгәр булһын һауа!* Һөйләменең төрөн билдәләгеҙ:

1. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм
2. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм
3. Ҡатнаш ҡушма һөйләм
4. Теҙем

**Задание 37**. *<u>Минең</u> атаҡлы башҡорт юртаҡтарын күргем килә* һөйләмендә аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй һөйләм киҫәге?

1. Тултырыусы
2. Хәл
3. Сифат

4. Аныҡлаусы

**Задание 38**. Бер составлы һөйләмдең төрөн билдәләргә: *Ҡайтыр инем.*

1. Билдәле эйәле һөйләм
2. Билдәһеҙ эйәле һөйләм
3. Эйәһеҙ һөйләм
4. Дөйөм эйәле һөйләм

**Задание 39**. Эйә эйәрсәнле эйәртеүле ҡушма һөйләмде билдәләргә:

1. Шуныһы бөгөн үкенесле: Мәсәғүт ағайҙың бер генә хаты ла ҡалманы миндә.
2. Шундай кешеләр була: бер күреүҙән үк ул һине үҙенә тарта.
3. Шулай ғәҙәтләнгәнмен: тыуған ауылда тәүҙә тирә-яҡты йөрөп ҡарап сығам.
4. Эш кемдеке – бүләк шуныҡы.

**Задание 40**. Схемаға тап килгән һөйләмде билдәләгеҙ: (аныҡлаусы һөйләм), (ваҡыт һөйләм), (баш һөйләм):

1. Зөлҡәрнәй әйткәнде башҡалар ҙа дөрөҫләгәс, Буранбай тағы ярһыны.
2. Сикә сәстәре ағарған ике ҡарт һалдат шундай итеп ҡосаҡлаштылар, әгәр улар саҡматаш булһа, көлтәләй осҡон сәсрәр ине.
3. Тәбиғәт биргән ижади осҡон ялҡынға әүерелһен өсөн, үҙеңдең аң-дәрәжәңде, белемеңде арттырыу өҫтөндә туҡтауһыҙ эшләргә кәрәк.
4. Дөрөҫ яуап юҡ.

**Задание 41**. *Тауҙары – алтын-көмөшкә, һыуҙары – балыҡҡа, ҡырҙары игенгә бай ул ерҙең* һөйләмендә һыҙыҡ ни өсөн ҡуйылған?

1. Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һөйләмдәрҙән төҙөлгән теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм булғанға
2. Хәбәр эйәрсән һөйләм баш һөйләмдән һуң килгәнгә
3. Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле тиң хәбәрҙәр араһында
4. Хәбәр төшөп ҡалғанға

**Задание 42**. Айырымланған хәл әйтемле ябай һөйләмде табырға:

1. Ниндәй матур, талғын йырлай Аҡйондоҙ.
2. Иҫ киткес, таң ҡалырлыҡ, ғәжәп матур шишмә.
3. Мең йыл быҫҡып йәшәгәнсе, бер көн дөрләп яныу артыҡ.
4. Ҡояш кисләүгә, үҫмерҙәр арып-талып йығылдылар.

**Задание 43**. *Иллейыл үтеүгә ҡарамаҫтан, әле лә һағынып иҫкә алыр кешеләрем күп* һөйләмендә өтөр ни өсөн ҡуйылған?

1. Инеш һөйләм эргәһендә булғанға.
2. Өҫтәлмәлекте айырыу өсөн.
3. Өндәш һүҙ эргәһендә килгәнгә.
4. Эйәрсән һөйләм менән баш һөйләм араһында.

**Задание 44.** Хәбәр эйәрсәнле һөйләмдә ике нөктә ҡуйылған юлды билдәләргә:

1. Кем эшләмәй (?) шул ашамай.
2. Шуныһы асыҡ (?) тау йылғаһы диңгеҙгә етмәйенсә туҡтамай.
3. Йәнә шуны өҫтәргә кәрәк (?) мин быйыл ғына уҡыуҙы тамамланым.
4. Дөрөҫ яуап юҡ.

**Задание 45**. *Халыҡ аҡыллы әйтә: йылға ҡороһа, үҙәне ҡала* һөйләменең төрөн билдәләргә:

1. Шарт эйәрсәнле эйәртеүле ҡушма һөйләм.
2. Тиң эйәрсәнле ҡушма һөйләм.
3. Ҡатнаш ҡушма һөйләм.
4. Теҙем.

**Задание 46**. Һөйләмдең төрөн билдәләргә: *Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы ҡабул итте.*

1. Кәм һөйләм.
2. Йыйнаҡ һөйләм.

3. Тулы һөйләм.
4. Тарҡау һөйләм.

**Задание 47.** Һөйләмдең ниндәй киҫәктәре тиң булып килгән?
1. Эйә
2. Хәбәр
3. Тултырыусы
4. Аныҡлаусы

**Задание 48**. Бирелгән ҡушма һөйләмдә нисә ябай һөйләм бар: *Ысынлап та, директорҙың маңлай һырҙары тәрәнәйгән, ҡаштары һалынған, күҙ ҡарашы ла кәйефе юҡлығын күрһәтеп тора.*
1. Ике
2. Өс
3. Дүрт
4. Биш

**Задание 49.** Ҡушма һөйләмдең төрөн билдәләргә: *Шуныһы ҡыуаныслы: Хәҙер беҙ һәр кемгә лә исеме йә фамилияһы менән өндәшәбеҙ, сөнки беҙҙә дүрт Гөлнара, өс Азат, ике Салауат, ике Лариса бар.*
1. Теҙем
2. Тиң булмаған эйәрсәнле ҡушма һөйләм
3. Тиң эйәрсәнле ҡушма һөйләм
4. Ҡушма һөйләмдең бөтөнләй башҡа төрө

**Задание 50**. Һөйләмдәр араһынан эйә составынан ғына торғанын күрһәтергә:
1. Көйө дәртле генә.
2. Урамға керҙек.
3. Кешегә иң ауыры – үҙ асылына төшөнөү.
4. Ағиҙел яры.